***Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ,***
***М.Аҡмулла исемендәге***
***БДПУ профессоры***

# Аҙымдары ышаныслы, алымдары ырамлы



XX быуаттың шаулы һуңғы йылдары. Шул хәтеремдә ҡалған. Идеология мәсьәләләре буйынса, буғай, пленум алдынанраҡ, ғалим-ғөләмәләрҙе КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары Хәбибуллин йыйып алды. Унда һүҙ агитация, пропаганда менән бер рәттән матбуғат, нәшриәт эшмәкәрлеге хаҡында барҙы. Минең урыным Ғайса ағай Хөсәйенов менән йәнәш тура килгән ине. Беҙҙең бөтәбеҙ исеменән дә ул сығыш яһарға ниәтләнә ине. Ара-тирә һүҙ ҡатышабыҙ. Мин әйтәм:

— Ғайса ағай, “Фән” тип аталамы ул, “Ғилем” типме, Мәскәүҙәге “Наука” тибындағы нәшриәт булһа ине.

— Эйе шул, — тине лә Ғайса ағайым ҡағыҙына ниҙер теркәп ҡуйҙы.

Осрашыуҙа һөйләшеү көсөргәнешле шарттарҙа барҙы. Уны шунан да күреп була ине: беренсе секретарҙың тупаҫыраҡ ырғытҡан репликаһы буйынса ярҙамсылары, эләгә-йығыла, ялт итеп сығып китәләр, йүгерә-атлап килеп инәләр ҙә түрә алдына ниндәйҙер ҡағыҙ һалалар.

Нәүбәте еткәс, Ғайса Батыргәрәй улы трибунаға сыҡты. Ығы-зығы уға тәьҫир итмәне. Һәр хәлдә, түрәнең ярҙамсыларынан айырмалы, ул ҡаушап ҡалманы, әйтер һүҙен ҡыйыу ғына итеп теҙеп әйтеп сыҡты. Шул иҫәптән, үҙенең сығышында, ғалимдарҙың хеҙмәттәрен баҫтырыу өсөн республикабыҙҙа “Наука” тибындағы, “Ғилем” йә “Фән” тигән нәшриәт булдырыу зарур икәнен белдерҙе. Алдан әҙерләгән тәҡдиме булдымы, әллә, урыҫ әйтмешләй, ашаған саҡта аппетит килә, тигән кеүекме, бер ижтимағи-сәйәси һәм ғилми, мәҙәни журналға ла республикабыҙҙа ихтыяж ҙур икәнен белдерҙе. Шуны әйтмәк булам: ҡапыл ғына түгел, тора-бара ошо ике теләк тә, Аллаға шөкөр, ғәмәлгә ашты. Тәүгеһенең ғәмәлгә ашыуына — республикабыҙҙа фәндәр академияһы асылыуы, икенсеһенә 1995 йылда I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәрелеүе сәбәпсе булды. Беҙҙә: “Инициатива наказуема”, — тиҙәр. Әллә шуны раҫлап, әллә яҙмыш ҡушыуы буйынсамы, ойоштороусыларының береһе ҡоролтайыбыҙ башҡарма комитеты булған,

“Ватандаш” тип аталған яңы журналдың беренсе баш мөхәррире итеп академик Ғайса Хөсәйенов тәғәйенләнде. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, “Журналистика өлкәһендә эшләп ҡарамаған башы менән был журналды ҡалайтып етәкләр икән?” тигәнерәк һорау башта әҙ ишетелмәне. Әммә яуаплы мөхәррир, минең ҡарамаҡҡа, аптырап ҡалманы. Төп эше — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙәбиәт бүлеген етәкләү менән бер рәттән, икенсе төрлө әйткәндә, “производствонан айырылмайынса”, үҙенең янына Рәүеф Насиров, Рәмил Йәнбәков, Мәүлит Ямалетдинов, Миңлеғәли Яҡупов ише журналистарҙы туплап, ғалим бөтмөрлөгө менән ағайыбыҙ ең һыҙғанып яңы “производство өлкәһе”нә тотондо. Журналдың тәүге һандарынан уҡ унда ижтимағи-сәйәси материалдар ҙа, тарих, иҡтисад, мәҙәниәт, тел мәсьәләре, әҙәби әҫәрҙәр менән бер рәттән, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады ла сағылыш ала башланы. Йәғни уның төп йүнәлештәре билдәләнде. Тиҙҙән уны “энциклопедик журнал” тип баһалай башланылар. Хаҡ һүҙ. Тик энциклопедияларҙа мәғлүмәттәр, асылда, аннотация кеүегерәк кенә бирелһә, журнал уларҙы һәр яҡтан нигеҙләп, тәрәнерәк яҡтырта. Төп һөнәрем фольклорсы булараҡ, мин шуға ҡыуанып бөтә алмайым. Ғ.Б.Хөсәйенов, Н.Т.Зарипов, Ф.А.Нәҙершина, С.Ә.Галин, Р.Ә.Солтангәрәева, Б.С.Байымов, Г.Р.Хөсәйенова, Н.Ә.Хөббитдинова, Г.В.Юлдыбаева, Ю.И.Ғәйнетдинов ише коллегаларымдың күп кенә хеҙмәттәре башлап “Ватандаш”та донъя күрҙе. Ошо журнал арҡаһында, быға тиклем телгә алынһа ла, тексын ишетергә, күрергә яҙмаған фольклор әҫәрҙәре менән танышырға форсат тыуҙы. Ошо йәһәттән “Ватандаш” хатта үҙенсәлекле бер эксперименталь майҙан хеҙмәтен дә үтәй башланы. Көнбайыш Европала, Балтик буйы илдәрендә йәшәүселәр өсөн бөгөн милли ғорурлыҡ иҫәпләнгән эпик ҡомартҡыларҙың текстарын заманында төрлө-төрлө “ярсыҡтар”ҙан монахтар, шағирҙар, белгестәр төҙөгән. Уларҙы фәндә “йыйылма тәнҡиди” текст йә вариант, версия тип атайҙар. Ҡырғыҙ халҡының күләме менән донъяла тиңе булмаған тип иҫәпләнгән “Манас” дастаны ла, асылда, шул сәбәптән хасил булған төрлө сюжеттар тупламаһынан тора. Беҙҙә бындай экспериментҡа халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғолов маһир булған. Мәҫәлән, уның “Ватан һуғышы” ҡобайыры бер нисә сюжеттан туҡылған. Ошо әйтелгәндәр ниндәйҙер кимәлдә уның ҡулы аша үткән “Байыҡ Айҙар сәсән”, “Аҡбуҙат”, “Юлай менән Салауат”, “Урал батыр” ҡобайырҙарына ла ҡағыла. Күренекле шағирҙарыбыҙ Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, тарихсы Әбүбәкер Усманов һәм Мөхәмәтша сәсән Буранғоловтарҙың бер ҡулдан “Иҙеүкәй менән Мораҙым” ҡобайырының йыйылма тәнҡиди версияһын төҙөгәне мәғлүм. “Ватандаш” журналы ошо традицияны тергеҙергә булышлыҡ итте. Башҡорт фольклорында тырым-тырағай күренеш кеүек осраштырған айырым мотивтар, ҡыҫылған, ҡыҫҡартылған сюжеттарҙы ойошторо̄у нигеҙендә Ғайса Хөсәйенов “Ҡорҡот ата”, “Ләйлә менән Мәжнүн”, “Бей Туҡсаба уғланы”, “Мөйтән бей”, “Уғыҙ хикәйәте”, “Иҙел менән Яйыҡ” кеүек ҡомартҡыларыбыҙҙы тергеҙҙе. Бының өсөн оло рәхмәт уға!

Әле генә һымаҡ... Бәй, “Ватандаш” журналына егерме йәш тә тулған, имеш. Ғүмер миҙгелдәре тураһында ҡобайыр әйткәндә, боронғо сәсәндәр: “Егермелә тал сыбыҡтай буралаһың”, — тиһә, “Ватандаш” тегеһенә, быныһына ярайым, тип төрлө яҡҡа буралманы. Икенсе бер сәсәндең:

“Егермелә булдым һыуҙа уйнаған балыҡтай”, — тигәнен раҫлап, ирекле йөҙөүен белде. Өсөнсө бер сәсән:

Егермелә — егетмен,
Егермелә — егетмен,
Ниәтемә етермен,
Етеп, үтеп китермен, —

тигән кеүек, “Ватандаш” та һаман алға ҡарар, алға барыр. Сөнки егермелә егет булыу — бер эш. Егермелә ысын егет ҡорона инеү шарт. Сөнки тағы бер сәсән:

Егермелә егет ҡорона керермен,
Донъя хәлен, илдәр гиҙеп, белермен.
Алға көнгә уңай ниәт ҡорормон,
Утыҙ йәштә уттай уйнап торормон, —

тигән бит. Шуға күрә “Ватандаш”ҡа яңы юлдар, яңы дуҫтар табаһы бар; биләмәһен киңәйтмәгә, билен биштән быуып, яңы хәбәр, яңы әҫәрҙәр менән лыҡа тулы биштәрен иңенә аҫып, ил тынын ишетә-ишетә, яңы фекерҙәштәр табып, уларҙы иш итә-итә, әленән-әле сәфәр ҡылыу кәрәк. Журналды таратыуҙың яңы ысулдарын табыу тураһында уйланыу ҡамасау итмәҫ ине. Әйтәйек, мәктәптәрҙәге өлкән класс уҡыусыларының дүртәре, бишәре, алтышары бер булып журналдың бер данаһын алдырһа, бакалаврҙар, магистранттар ҙа ошо юл менән алдырһа, бер коллективтағы хеҙмәттәштәр, ауылда — күрше-күлән, ағай-эне шулай яҙылһа, яңы йыл бүләге итеп, журналға яҙылыу тураһында квитанция бүләк итешһәләр (мин үҙем, мәҫәлән, “Ватандаш” менән “Ағиҙел”де йылдың йылы өсәр-дүртәр дана яҙҙырам да балаларыма Ҡыш бабай бүләге итеп тапшырам), абруйлы милли журналыбыҙҙың тиражы ла, бәҫе лә артыр ине.

